

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы



Ноғман Сөләймән улы Мусин 1931 йылдың 17 июлендә Башҡортостандың Ишембай районы Ҡолғона ауылында тыуған.

Ноғман Мусин – хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең иң күренекле прозаиктарының береһе. Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтын тамамлағас, тәүҙә уҡытыусы, һуңынан мәғариф бүлегендә инспектор вазифаһын башҡара. 1953 йылдан алып республика баҫмаларында, Башҡортостан Республикаһының яҙыусылар Союзында, «Китап» нәшриәтендә эшләй. Әҫәрҙәре 1952 йылдан алып матбуғатта баҫыла башлай.




# Әҫәрҙәре

Ҙур эш(хикәйә). Ноғман Мусин
Зөһрә. 1960 й.
Ғорурлыҡ. 1962 й.
Ауылым юлы. 1963 й.
Кеше йылмая. 1965 й.
Ер биҙәге. 1967 й.
Беҙ ауылдаш малайҙар. 1968 й.
Өҙәрем юл кешеләре. 1970 й.
Һинең мөхәббәтең. 1972 й.
Аҡ юл һиңә. 1973 й.
Һайлап алған яҙмыш. 1974 й.
Мәңгелек урман. 1-се китап. 1975 й.
Мәңгелек урман. 2-се китап. 1978 й.
Ғүмерҙең бер мәле. 1979 й.
Зәңгәр тауҙа аҡ болан. 1980 й.
Ер биҙәге. 1981 й.
Төнгө усаҡ яҡтыһы. (Яңы вариант). 1983 й.
Еҙ ҡыңғырау. 1986 й.




«Ноғман Мусин – замана яҙыусыһы. Әҫәрҙәрендә кеше бәҫе, дәрәжәһе алға ҡуйыла, әҙәп ҡанундарының тормошсанлығы һәм матурлығы данлана».

*Роберт Байымов*



“Ноғман Мусин Урал тәбиғәтенә , урманға- ер биҙәгенә ғашиҡ кеше. Ул тыуған төйәген аңлай, һулышын тоя. Уның геройҙары Ергә әсәгә ҡараған төҫлө ҡарай. Шуға ла әҫәрҙәрендә Ер – пейзаж, фон булып ҡына хеҙмәт итмәй, ә тере йән кеүек тасуирлана.”




Ишембай районы Ҡолғона ауылында Ноғман Мусиндың йорт- музейы асылды


САБАТАСЫ
ҺУНАРСЫ


БАЛТА ОҪТАҺЫ



*«Ағиҙел» журналы редакцияһында 1960 йыл, 30 декабрь*



«Ағиҙел» журналы редакцияһы коллективы







“Яҙыусы булыу өсөн,  донъяға, тәбиғәткә ҡарап һоҡланыу һәм белем генә етмәй, һин шул тормоштоң әүҙем ижадсыһы, егәрле эшмәкәре лә булырға тейешһең.Үҙ ҡулың белгән эш, шул эште башҡарған кешеләр тураһында яҙыу, уларҙың иҫтә ҡалырлыҡ образдарын тыуҙырыу еңелерәк. Әлбиттә үҙең яҙған мөхитте яҡшы белеү, уны ихлас яратыу мотлаҡ, тик уны ситтән генә күҙәтеүсе булырға ярамай…




Ноғман Мусин – үҙ темаһын ғына түгел, үҙ стилен, уға ғына хас һүрәтләү алымдарын тапҡан яҙыусы. Тәбиғәт тигән ҙур социаль проблематиканы тормоштоң киң һулышы, тыуған ерҙе матурлар өсөн замандаштарҙың ынтылышлы эшмәкәрлеге менән органик бәйләнештә биреүгә өлгәшә.”  (Р.Байымов.)



“Ноғман Мусиндың әҫәрҙәре заман үҙгәрештәренә лә бирешмәй, сөнки улар кешеләрҙе тормош, ғүмер яҡшылыҡ һәм яманлыҡ тураһында уйланырға, үткән юлдарына , бөгөнгөһөнә һәм киләсәккә күҙ ташларға мәжбүр итә.” (Р.Байымов.)



Н. Мусин әҙәбиәт өлкәһендәге оло хеҙмәте өсөн республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды (1991 й.). Уға 2001 йылда Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән исем бирелде. 1963 йылдан Яҙыусылар союзы






Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!